# Йәшлеккә алып ҡайтам...

Рәмил Сурамғолов һүҙҙәре









Әй ғәзиз тупрағым,
Тыуып-үҫкән ярым,
Беләм, һиндә бөтмәҫ моң барын.
Йәйен-ҡышын тынмай
Шишмәләрең йырлай
Әсәйемдең бишек йырҙарын.

Ҡушымта:

Шул уҡ ауыл да ул,
Тик үҙгәргән ауыл,
Тик юғалған икән йыр-моңдар.
Телһеҙ булып ҡалған,
Йыр-моңдарһыҙ ҡалған
Беҙ үҫкәндә тартҡан гармундар.

Ҡушымта.

Аҡташ - тыуған бишек,
Хәлкәйҙәрең нисек?
Үҙгәрттеме йылдар дауылы?
Йыр-моңло улыңды,
Ғәзиз гармуныңды
Һағынаһыңмы һин, ауылым?

Ҡушымта.